*Ирина ӘХМӘТЙӘНОВА,*
*сәнғәт тарихы уҡытыусыһы*

*Әхмәтйәнова Ирина Дәрүиш ҡыҙы Баймаҡ ҡалаһында тыуған. Магнитогорск дәүләт педагогия институтының художество-графика факультетын тамамлағандан һуң Ҡ.Дәүләткилдиев исемендәге художество гимназияһында Башҡортостан һынлы сәнғәте тарихын уҡыта, БДУ-ла эстетика дәрестәре алып бара. Боронғо Уралдағы матди һәм рухи мәҙәниәтте, башҡорт мифологияһын тикшерә, Башҡортостан рәссамдарының ижадын өйрәнә.*





*«Вариҫ». 1998 й.*

Сығыу талантлы йәш башҡорт рәссамдарының береһе Йәлил Сөләймәновтың ижадында ла нәфис-символик фекерләү ҡеүәһе дауам итә. Уға башҡорт мәҙәниәтенең асылын үҙенсә күреү, кеше донъяһына үҙ мөнәсәбәте булыу хас. Йәлил Сөләймәновтың ижады боронғо милли мәҙәниәт ерлегендә һәм дөйөм кешелеккә хас ҡиммәттәр хаҡында ныҡышмалы уйланыуҙар нигеҙендә үҫеште.

Үҙ ижадында рәссам бала саҡтан күңел түрендә урын алған боронғо башҡорт легендалары һәм хикәйәттәренә мөрәжәғәт итә. Рәссам Башҡортостандың иң киткес гүзәл төбәге, меңдәрсә йылдар элек барлыҡҡа килгән, ваҡыттар үтеү менән даны арта барған Шүлгәнташ мәмерйәһе менән киң билдәле Бөрйән ерендә тыуып үҫкән. Мәмерйә эсендә һаҡланған ғәжәйеп һүрәттәр һәр саҡ иғтибарын йәлеп итә уның. «Үгеҙҙәр» (1995) картинаһы бына ошо алыҫ үткәндәр шаңдауы төҫлө. Һүрәттәге үгеҙҙәргә альтамир бизондарының ярһыуы һәм дәрте хас, уларҙа Ҡатил батшаның үгеҙе менән алышҡан Урал батырҙың еңеүгә булған ихтыяр көсө лә, бик күп йәш егеттәрҙе һәм ҡыҙҙарҙы һәләк иткән грек Минотаврының аяуһыҙлығы ла, Пикассоның испан Герникаһының емергес көсө лә сағыла. Был образдар тормош метафораһын күрһәтә, ә ул уйлау һәм фекерләүҙә генә түгел, ә әүҙем көрәштә, һынауҙарҙы еңеп сыға белеүҙә күренә.

«Йылға аша күпер» (1996) картинаһы иһә икенсе сюжет аша ҡыйынлыҡтарҙы еңә белеү идеяһын аса. Кеше ғүмере мөхәббәт, йәшлек, уңыштар һәм табыштарҙан ғына тормай, унда һикәлтәләр ҙә байтаҡ. Һәр кеше яҙмы-



09-2001.p65 173 29.08.01, 13:16
Black





*«Зәйнәп инәй». «Кешеләр һәм тауҙар» серияһынан. 1999 й.*

*«Юлда». «Оҙон көй» серияһынан. 1997 й.*

шында бәхетле мәлдәр менән бергә юғалтыуҙар, икеләнеүҙәр ҙә осрай, һәр кем ғүмер юлында осраған үрҙәрҙе һәм упҡындарҙы, ҡаршы ағымдарҙы үтә белергә, үҙ йылғаһын, үҙ күперен табырға тейеш. Үрҙә әйтелгән картинала әле генә йылға өҫтөндәге күпер аша үткән йәш ғаилә — ҡатын, ире һәм уларҙың балалары һынланған. Улар өсөһө бер бөтөн, бер ғаилә. Тормош ҡыйынлыҡтарына осрағанда рух ныҡлығын һаҡлай алған йәш ғаилә ағзаларының йөҙөндә ҡәнәғәт йылмайыу. Картинаны ҡараған һәр кеше: беҙ ҙә улар кеүек тормош күперен бергәләп, күңел сафлығын, үҙ ғаиләбеҙҙе, ырыуыбыҙҙы, еребеҙҙе һаҡлап ҡалып үтә алырбыҙмы, тигән уй кисерә.

Әлбиттә, тормош ҡуйған һорауҙарға һәр рәссам үҙенсә яуап бирә, был яуап уның эш шарттарына, күңел торошона бәйләнгән.

Йәш рәссамдың «Тауҙар йыры» (1991) тигән тәүге эштәренең береһе үк тамашасы иғтибарын йәлеп иткәйне. Был әҫәр рәссамдың ижад юлын тикшереүҙәге тәүге картина булып хеҙмәт итә ала, сөнки унда Й.Сөләймәновтың рухи һәм ижади эҙләнеүҙәренең сығанаҡтары айырыуса асыҡ сағыла.

Беҙҙең күҙ алдында — Урал төбәгенең икһеҙ-сикһеҙ тау теҙмәләре. Улар ҡояш нурында янған, елдә елләнгән. Офоҡтарға барып тоташҡан мәлдә тау битләүҙәре ниндәйҙер көй һуҙған төҫлө. Тәбиғәттең торошо ҡурайсы ҡарт уйнаған ҡурай моңона ауаздаш. Күктә, бейектә ҡоштар һәм күк батшаһы Сәмреғош рухы төҫлө бөркөт ҡыйылып оса. Бөркөттөң ирекле, көслө ҡанаттары ерҙе, унда йәшәгән кешеләрҙе һаҡлаған төҫлө.

Тауҙарҙы, кешене, барса тәбиғәтте һынландырыуҙағы төҫтәр уртаҡлығы композицияның бер бөтөнлөгөн көсәйтә һәм рәссамдың донъяның берҙәмлеген асыҡ аңлауын һыҙыҡ өҫтөнә ала. Рәссам артабан да был темаға ҡабат-ҡабат мөрәжәғәт итә, ошо мотивты ҡабатлай, әммә ул торған һайын сағыуыраҡ, тасуирираҡ төҫ ала.

Йәлил Сөләймәновтың донъяға ҡарашы формалашыуында атаһы, танылған фольклорсы, башҡорт халҡының тарихи ынйыларын туплаусы, бик күп башҡорт ғалимдарын әҙерләгән академик Әхмәт Мөхәмәтвәли улы Сөләймәновтың роле баһалап бөткөһөҙ. Үҙе лә иҫ киткес тырыш, кешелекле һәм кеселекле Әхмәт Мөхәмәтвәли улы бәләкәйҙән һүрәт төшөрөргә яратҡан һәм улын да сәнғәткә ылыҡтырған, уның күңелендә тормошҡа ижади мөнәсәбәт тәрбиәләгән.

Быуындар күсәгилешлеге — Йәлил Сөләймәнов ижадындағы төп һәм иң мөһим темаларҙың береһе. «Өс быуын» (1995), «Кәмә янында» (1996), «Ырыу ағасы» (1998), «Өләсәй ейәне менән»



09-2001.p65 174 29.08.01, 13:16
Black

(1996), «Ҡарт» (1999) картиналары ошоно раҫлай. Рәссам халыҡ образдарында башҡорт һыҙаттарын һынландыра, уларҙың йөҙөндә эхлаҡи көс, илһам һәм дарман һиҙелә. Йәлил быуындарҙың айырылғыһыҙ рухи бәйләнешен дөйөм кешелек ҡиммәте итеп раҫлай. Шуға күрә Йәлил Сөләймәновтың ижады уның эргәһендәге кешеләр өсөн генә түгел, башҡа ил халыҡтары өсөн дә мөһим. Әйтәйек, Вашингтондағы картиналар галереяһы директоры, Америкала йәшәүсе Наилә Александр рәссамға яҙған хатында уның «Өс быуын» картинаһының әлеге хужаһы өсөн ҙур әһәмиәткә эйә булыуын билдәләй: «Уның өсөн картина иҫ киткес тартыу көсөнә эйә. Хужа был әҫәрҙе бер нисә тапҡыр килеп һораны. Картина менән уның араһында ғәжәйеп бер бәйләнеш барлыҡҡа килеп, ул хужаның улы менән үҙ-ара мөнәсәбәт символына әүерелде. Ул һинең картинаңда үҙенсәлекле фәлсәфәүи аҡыллылыҡты тойомлай, сөнки унан йылылыҡ, наҙ, тыныслыҡ бөркөлә».

Йәлил Сөләймәнов ижадында ошо ерҙә быуаттар буйы йәшәгән ябай халыҡтың эске рухи донъяһын, цивилизация кеүек төшөнсә боҙа алмаған тәбиғи тормошон аса. Рәссамдың әҫәрҙәрендә кешенең тәбиғәт, үҙ-үҙе һәм тирә-йүндәгеләр менән тулыһынса килешеп йәшәүе күрһәтелә.

Йәлил Сөләймәновтың «Ай һәм тирмәләр», «Ҡәнифәнең төшө», «Колонсаҡ», «Яңғыҙ юлсы өсөн бишек йыры» кеүек лирик әҫәрҙәре тәбиғәт һәм кешенең изге әһәмиәтен, халыҡ ижады образдарын, алыҫ бала саҡ хәтирәләре хаҡында тәьҫораттарҙы сағылдыра.

Рәссамдың живопись өлгөләрендә бер аҙ төнгә яҡын, ҡояш байыған һәм ҡалҡҡан саҡтағы төҫтәр өҫтөнлөк итә, шуға ла буяуҙар сағыу, матур һәм ҡатмарлы. Ошо рәүешле ер һәм күк йөҙөн тасуирлаған буяуҙар айырыуса ғәжәйеп төҫ ала һәм тирә-йүнде, тәбиғәтте гүзәл бер сер донъяһы итә. Картиналарҙағы буяуҙар төҫө ысынбарлыҡтағынан айырыла. Йәлил Сөләймәнов өҫтәмә тондарҙы сағыштырыу, ҡапма-ҡаршы төҫтәрҙе оҫта ҡулланыу маһирлығына эйә.

Ғәҙәттә уның картиналарының композицияһы күп фигуралы булыуы менән айырылып тора. Кешеләр, ҡоштар, хайуандарҙың һүрәттәре ҡатмарлы рәүеш ала. Улар картинаның эсенә һыймай, ситенә сығып киткән кеүек. Әйтерһең дә һүрәтләнгәндәр ҙур донъяның бер бәләкәй генә өлөшө.

Шулай булыуға ҡарамаҫтан, рәссамдың һәр картинаһы тулы һәм тамамланған булыуы менән иғтибарҙы йәлеп итә. Ул үҙенең күп фигуралы композицияларында мотивтары төрлө булған үҙ композицион-техник системаһын булдырыуға өлгәшкән.

Йәлил күберәк квадрат формаһындағы композицияларҙы һайлай, сөнки квадрат эсенә генә түңәрәк яһап була. Уның картиналарындағы тигеҙ вертикаль һәм горизонталь һыҙыҡтар икһеҙ-сикһеҙ башҡорт далаларының офоҡтарына һәм тау түбәләренә, күк Урал күгенә һәм ерҙәренә тап килә — былар рәссам Йәлил Сөләймәнов әҫәрҙәренең төп һыҙаты.

Заманыбыҙ рәссамы булараҡ уға йәмғиәтебеҙҙәге төрлө ҡатмарлыҡтар ҙа, ҡаршылыҡтар ҙа аңлашыла. Уның «Ҡоро күл», «Ҡатын һәм ҡарғалар», «Иҫке кәмә», «Буш бишек» кеүек картиналарына трагизм хас. Ата-бабаларының рухи сығанаҡтарына мөрәжәғәт итеп, рәссам үҙен борсоған һорауҙарға яуап эҙләй. «Онотолған доға» тигән (1997) ғәжәйеп картинаһында, автор кеше менән донъялыҡ араһындағы боронғо бәйләнештәрҙе хәтерләткән төҫлө, мәмерйә алдында ай һәм йондоҙҙар нурына ҡойонған таш һын күренә.

Рәссамдың «Буш бишек. Легенда» (1998) картинаһын ҡарағанда башҡорт легендаһының йөкмәткеһен белеү мотлаҡ түгел. Уның асылы һүҙһеҙ ҙә, сәнғәт һүрәтләүе аша аңлашыла. Балаларын юғалтҡан, ә, бәлки, һаҡлай алмаған йәки бөтөнләй бала табыу бәхетенән мәхрүм булған оло йәштәге ҡатын-ҡыҙ образы. Ә был беҙҙең замандың яман һыҙаттарының береһе. Бәлки, үҫеп еткән балалары әсәләрен ҡалдырып киткәндер һәм был бишек әсә өсөн бер хәтирәлер? Әсә кеше иһә үҙенең балаларын һаман көтә.

Ҡайтыу темаһы рәссамды тулҡынландыра, уның ижади рухына тынғылыҡ бирмәй. Тап ошо уны «Тәңреләрҙең кире ҡайтыуы» (1998—1999) тигән картиналар серияһын яҙыуға этәрә.

«Ҡарға туйы» картинаһында алғы планда — ҡоштар-ҡарғалар, артабан кешеләр һүрәтләнә. Иң уртала — ҡояш. «Ҡарға туйы» борон-борондан башҡорт халҡы өсөн ҡояш һәм яҙ байрамы, ата-бабаларҙы иҫкә алып, доға



09-2001.p65 175 29.08.01, 13:16
Black

уҡыу, ғаиләгә һәм бар ырыуға изге теләктәр теләү мәле һаналған.

Артабан башҡорт халҡының алиһәһе, ғаилә усағын, ҡатын-ҡыҙҙы һәм балаларҙы яҡлаусы «Һомай» картинаһы үҙенең алтын төҫкә мансылған йомшаҡ һәм наҙлы буяуҙары менән иғтибарҙы йәлеп итә.

Мифологиялағы шикелле, Һомай алтын сәсле һәм аҡ ҡанатлы итеп һынлана. Ошо мәлдә ирекһеҙҙән «ҡатын-ҡыҙҙы ир кеше үпһә, ул ҡошҡа әйләнә» тигән ҡобайыр юлдары иҫкә төшә. Рәссам ҡатын-ҡыҙ образдарын үҙенсә сағылдыра, тәбиғи, күп осраҡта улар ҡатыны — балаларының әсәһе образына тартым була.

Ғәҙәттә Йәлил Сөләймәнов үҙенең картиналарының сюжеттарын һәм мотивтарын тормоштан ала — «Икәү», «Көтөү», «Бала тыуыу», «Исем ҡушыу», «Бишек йыры», «Балалар ағас янында» тап шундай. Улар ғаилә альбомындағы иң ҡәҙерле фотоһүрәт кеүек кешенең ғүмер юлын сағылдыра — ғашиҡ булыу, бала тыуыу, балалыҡ, йәшлек һәм ҡартлыҡ. Әммә рәссам ижадында тормошобоҙҙоң был ябай һәм мәңгелек хәҡиҡәттәре йәшәйештең нигеҙен тәшкил иткән донъяуи характерға эйә.

«Мәңгелек менән хушлашыу» картинаһы Йәлилдең иң сағыу әҫәрҙәренең береһе. Һәр һын, һәр хәрәкәт бөйөклөк менән тулы: доға уҡыр өсөн ике ҡулын бергә ҡуйған бабай, ҡулына бәпес күтәргән әсә, борғоһо менән донъяға яңы кеше — бала тыуыуын һөрәнләүсе малай... Барыһы ла яҡты, тулҡынландырғыс хистәр уята. Осоп йөрөгән ҡоштар иһә картинаға рухи күтәренкелек өҫтәй, оҙағыраҡ ҡарап торһаң, улар башҡорт келәмдәрендәге биҙәктәрҙе хәтерләтә.

Рәссам өсөн живопись һәм музыка туғандаш, шуға ла Йәлилдең музыкаға бәйле картиналары ла байтаҡ: «Ҡороған ағас моңо», «Думбыра», «Ҡурай тураһында легенда», «Оҙон көй», «Хушлашыу йыры», «Ҡобайыр», «Онотолған моң», «Бишек йыры», һ.б.

Күп фигуралы «Ҡобайыр» композицияһында халыҡ сәсәнде тыңлай. Төрлө уйҙарға батҡан кешеләрҙең йөҙөндә яҡты ҡояш нурҙары уйнай. Рәссамдың бөтә картиналарында ла кешеләр тыныс һәм уйсан итеп һүрәтләнә, уларҙа тыныс донъя тауышы ишетелгәндәй. Яҡындағы нәмә алыҫая, алыҫтағы яҡынайған төҫлө. Йәлилде кешеләрҙең әлеге мәлдә нимә эшләүҙәре түгел, ә мәңгелек мәсьәләләр борсой.

Йәлил Сөләймәновтың ижадында кеше үҙ донъяһына сумған. Образдар тәбиғи, кешелектең һәм тәбиғәттең төп күренештәре рәссам өсөн матурлыҡтың асылы һәм ижадының нигеҙе булып әүерелә. Рәссам үҙ халҡының тәбиғәт балаһы булыуын һәр саҡ иҫтә тота һәм беҙҙе лә ошо ябыҡ һәм алыҫ донъяға алып инә, уның менән бергә беҙ ҙә бергә кисерәбеҙ. Рәссамдың эш алымдары, форма, төҫ һәм биҙәк, музыка кеүек, уны ҡапыл ғына һүҙ менән аңлатып булмай, ул үҙе шиғриәт кеүек ҡабул ителә.

Бүре һәм арыҫлан, бөркөт һәм ат — был образдар Сөләймәнов ижадында айырыуса йыш осрай. Борон-борондан кеше тормошонда тәрән мәғәнәгә эйә булған хайуандар һәм ҡоштар рәссам ижадының төп темаһы булып тора. Шуға ла Башҡортостан тураһында иң яҡшы картиналарға үткәрелгән Республика художество конкурсында (1998) уның «Тотемдар» серияһындағы анималистик темаһы киң танылыу яуланы һәм Йәлил Сөләймәнов беренсе урынды алды. Башҡорт халыҡ эпостары, легендаларындағы Бүре, Арыҫлан, Шоңҡар — кешенең тәбиғәт менән айырылғыһыҙ бәйләнешен тасуирлау билдәһе генә түгел, ә көс, бөйөклөк һәм аҡылды сағылдырыу символдары ла булған.

Рәссам ижадында халыҡтың көнкүрешендәге тәбиғи нәмәләр — тирмә, бишек, күпер, йылға, кәмә, ағас, ҡош һәм ат та символ-метафораға әүерелә.

Образлылыҡ — рәссам Йәлил Сөләймәнов ижадының төп тасуирлау һыҙаты. Уның картиналарын П.Пикассоның «Олатай һәм ейәне», уҡытыусыһы Ә.Лотфуллиндың «Әсәләр» эштәре менән сағыштырырға мөмкин: ҡулдар, бармаҡтар, портреттарға характеристика алымдары сағыу, кешеләр ҙә ҡыйыу дөйөмләштереп бирелә. Йәлил мәктәптә, институтта уҡығанда эйә булған живопись өлкәһендәге реалистик һәм авангард мөмкинлектәрен дауам итә, уларҙы гармоник бәйләнештә үҫтерә бара. Бына шулай көсөргәнешле эҙләнеүҙәр аша рәссам үҙенә генә хас художество алымдары булдырған. Һәр рәссам үҙ стиле булыу менән танылa, Йәлилдең дә үҙенә генә хас алымдары бар. Уны таныйҙар, уның хаҡында оҫта рәссам буларaҡ телгә алалар.

Донъяны саф һәм матур итеп күреүсе рәссам Йәлил Сөләймәнов өр-яңы ижади бейеклектәр яулай.



09-2001.p65 176 29.08.01, 13:16
Black